*Мәрйәм ШАКИРОВА,*
*«Яйыҡ» гәзите хеҙмәткәре*



# «ÍÈÌÅÑ» һыйырҙары

Германиянан килтерелгән һыйырҙарға халыҡ үҙенсә шулай тип исем бирҙе лә ҡуйҙы.

«Мулдаҡай» сикләнгән яуаплылыҡтағы ширҡәт етәксеһе Ришат Хафизов күптән инде элита тоҡомло һыйырҙар үрсетеү хаҡында хыяллана ине. Илдәге тоҡомсолоҡ заводтарының бөтәһенә тиерлек йөрөп тә сыҡты — тик күңеленә ятҡанын тапманы.

Эҙләгән — тапҡан, ти бит. Рәсәй тоҡомсолоҡ берекмәһе тәҡдим иткән һыйырҙар етәксенең күңеленә хуш килде. Һәм ул Германиянан 94 тана һатып алыуға килешеү төҙөп тә ҡайтты. Финанслау мәсьәләһе хәл ителеп ҡуйылғайны инде — өс йыл малсылыҡ продукцияһы биреп тороу шарты менән «Тау-байыҡтырыу комбинаты» акционерҙар йәмғиәте хужалыҡҡа тейешле аҡсаны бирҙе.

Малдар килеүгә ферманы яҡшылап әҙерләнеләр. Хужалыҡтың Һөләймән бүлексәһенә урынлаштырырға ҡарар иттеләр. Алдынғы һаналған был коллективта эшкә ҡараш күпкә өҫтөн шул.

Апрель аҙағында һыйырҙар тейәлгән ике ҡатлы фургон Һөләймәндә малҡайҙарҙы ҡалдырып китте. Таналарҙы 4 һауынсыға беркеттеләр. Малсылар, бригадир, ветеринар ҡуйҙылар. Көндөҙ ҙә, төндә лә бер кеше һәр саҡ малдар янында була. Һәр береһенә 45 мең һум түләп алынған бит ни тиһәң дә!

Беҙ барғанда һыйырҙарҙың карантин срогы үтеп өлгөрмәгәйне. Малҡайҙарҙың үҙҙәрен күрә алһаҡ та, быҙауҙар янына беҙҙе индермәнеләр.

«Нимес» һыйырҙары, ысынлап та, күптәрҙең күҙен ҡыҙҙырырлыҡ шул. Мөһабәт кәүҙә, йылҡылдап торған тире, үҙҙәре таҙа. Яңы ғына йыуындырып сығарғандармы ни! 26 айлыҡ таналарҙың һәр береһе 645-әр килограмм, ә уларҙың яңы тыуған быҙауҙары 37-45-әр килограмм тарта. Таналарҙың дүртәүһе килгәс тә, май айында уҡ быҙауланы. Июнь айында тағы утыҙ өсө быҙау килтерҙе.

Тәүге көндәрҙә яңы быҙаулаған һыйырҙар 6-8-әр килограмм һөт бирһә, яйлап һөт арта төштө. Хәҙер уларҙың күбеһе тәүлегенә 24-әр килограмм һөт бирә.

Беҙҙең быҙауҙарҙан ҙур булғас, «нимес» быҙауҙары һөттө лә күп эсә. Уларға 3 ай буйы 600 литр һөт эсерергә кәрәк. Беҙҙең быҙауҙарға 2 айға 180-250 литр ҙа етә.

Был тоҡом һыйырҙар үҙ илдәрендә тик фермаларҙа ғына аҫырала икән. Ҡырға сығып, үлән өҙөп ашауҙың ни икәнен дә белмәйҙәр.

— Тәүҙә, нисек өйрәтербеҙ икән быларҙы ашатырға, тип нык ҡурҡтыҡ, — ти баш зоотехник Ә.Әлмөхәмәтов. — Өйрәнделәр малҡайҙар. Үләнде ҡайһылайыраҡ итеп ашайҙар әле, яраталар. Кипкән үлән ҡырҙа үҫкән һутлы аҙыҡҡа етәме инде.

Әйтеүебеҙсә, таналар араһында бер генә үгеҙ ҙә юҡ. Яһалма торокторoу өсөн 200 доза орлоҡ кәрәк буласаҡ. «Башплемобъединение» менән һөйләшелгән, кәрәкле торокторoу материалдары килтерелгән дә инде. Яңы тыуған быҙауҙар аяҡҡа баҫҡас, уларҙы районның башҡа хужалыҡтарына һатасаҡтар. Алырға теләүселәр табылыр, моғайын. Сөнки бөгөнгө көндә һәр хужалыҡта күберәк ит, һөт һатып, күберәк аҡса эшләү һәм тиҙерәк аяҡҡа баҫыу теләге ҙур.